“Бөтә донъя башҡорттар королтайы”

Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһы йүнәлеш: башҡорт теле.

# Башҡорт халҡын һаҡлап ҡалыу юлдары:

**Автор:**
**Шаһиев Фәнүр Фәнит улы,**
**Башҡортостан,**
**Учалы районы, Һәйтәк ауылы.**

**2019 йыл.**

## Башҡорт халҡын һаҡлап ҡалыу юлдары:

- 1. Рух.
- 2. Тел.
- 3. Дин.
- 4. Сәләмәт тормош.
- 5. Матбуғат.
- 6. Изге урындар.
- 7. Тәбиғәт.
- 8. Исемдәр.
- 9. Йолалар.
- 10. Кейем.

- 11. Аш-һыу.
- 12. Тарих.
- 13. Билдәле шәхестәр.
- 14. Аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр ҡоро.
- 15. Ауылдар.
- 16. Әсбаптар. Китаптар.
- 17. Лозунгтар.
- 18. Кинолар, йәнһүрәттәр.
- 19. Бренд.
- 20. Ҡануниәт.
- 21. Топонимика.
- 22. Беҙ төрлө, ләкин беҙ бөтәбеҙ ҙә- башҡорттар!

- 1**. Рух.** Иң өҫтөн булып башҡорт рухы тора. Рухы булһа, телен дә өйрәнә, дингә лә ынтыла. Рух булмаһа, халыҡ бөтә. Үҙ телен белеп тә рухы булмаһа, балалары икенсе милләтле булып үҫә. Дини фанатиктар араһында милли рухты, башҡорт телен мөһим түгел тип әйтеүселәр бар. Был ҡараш дөрөҫ түгел. Балаларҙы башҡорт рухында үҫтерергә кәрәк! Рух бөтә нимәне үҙ эсенә ала.
- 2. **Тел**. Тел- милләттең төп билдәләренең береһе. Телебеҙ өсөн көрәшергә кәрәк. Баланы тыуғандан алып башҡорт теле мөхитендә үҫтерергә кәрәк.
- 3. **Дин.** Ислам дине беҙҙе берләштереүсе, туплаусы булып тора. Иманы булмаған кеше үҙ халҡына ла хыянат итә. Традицион исламды таратырға кәрәк. Халҡыбыҙға ислам динен индергән һәм рухи яҡтан үрнәк булған суфилыҡты инҡар итмәҫкә.
- 4. **Сәләмәт тормош һәм спорт.** Сәләмәт башҡорттан сәләмәт балалар тыуа. Эсмәгән, тартмаған, сәләмәт тормош алып барған кешеләр балаларға, йәштәргә үрнәк булырға тейеш. Спорт менән дуҫ булыу- насар ғәҙәттәрҙән арынырға бер этәргес көс. Эскелеккә ҡаршы көрәшергә кәрәк. йәштәргә үрнәк булырға тейеш. Спорт менән дуҫ булыу- насар ғәҙәттәрҙән арынырға бер этәргес көс. Эскелеккә ҡаршы көрәшергә кәрәк.

- 5. **Матбуғат** (СМИ). Рухты күтәреүсе, телде ҡурсалаусы, тарихты һаҡлаусы, милләтте ойоштороусы, сәләмәт тормошто алып барыуҙы пропагандалаусы булып матбуғат тора. Башҡорттарҙан рухлы журналистарҙы күп әҙерләргә кәрәк. Интернет, гәзит- журналдар аша эш итергә кәрәк.
- 6. **Изге урындар**. Һәр динден йә милләттең изге урындары бар. Уларҙы инҡар итергә ярамай. Уралыбыҙҙы, Ирәмәлебеҙҙе, Торатауыбыҙҙы һ.б. изге урындарыбыҙҙы таныу- уларҙы һаҡлауҙың бер төрө. Шул изге урындарҙы һаҡлау- Башҡортостаныбыҙҙы, ерҙәребеҙҙе, тауҙарыбыҙҙы, һыуҙарыбыҙҙы һаҡларға бер юл.
- 7. **Тәбиғәт.** Беҙҙең ата- бабаларыбыҙ Уралда борон-борондан йәшәгән. Беҙ Уралда йәшәйбеҙ. Беҙ бер ҡайҙан да килмәгәнбеҙ, беҙ бер ҡайҙа ла күсеп китергә йыйынмайбыҙ. Беҙ- аҫаба халыҡ! Тәбиғәтебеҙҙе һаҡлап алып ҡалыу- балаларыбыҙға мираҫ ҡалдырыу.

- 8. **Исемдәр.** Бер халыкты икенсенән айырып тороусы билдә- ул исемдәр. Мәғәнәле, ҡыҫҡа, боронғо башҡорт исемдәрен ҡушырға кәрәк. Никах уҡыған саҡта уҡ йәш ғаиләгә бүләк итеп башҡорт исемдәре китабын бүләк итергә була.
- 9. **Йолалар.** Боронғо башҡорт йолаларын онотмаҫҡа, үтәргә кәрәк. Һуңғы ваҡытта сит илдәрҙә белем алған йәш ислам белгестәре араһында бөтә башҡорт йолаларын инҡар итеүселәр күбәйҙе. Мосолман булыу- үҙ йолаларыңды инҡар итеү түгел.
- 10. **Кейем.** Башҡорт стиле, биҙәктәре, элементтары булған кейем тегергә, таратырға, кейергә кәрәк. Түбәтәй, түшелдерек һәм башҡа кейем өлгөһөн кейеү- ул башҡортлоҡтоң бер билдәһе. Теләгән мосолман ҡатын башҡортса хиджаб кейә ала, бөтәһенә лә кейем менән ғәрәптәрҙе ҡабатлау тимәгән.

- 11. **Башҡорт аш- һыуҙары** ата- бабаларҙан ҡалған мираҫ. Ҡалған халыҡтарҙан айырып торған бер үҙенсәлек. Хәләл көс менән үҫтереп алған хәләл ризыҡтарҙы ҡулланырға тейешбеҙ. Ҡымыҙ, ҡаҙы, буҙа, талҡан да башҡортлоҡтоң билдәһе. Ресторандарға традицион башҡорт продукттарына таянып яңы башҡорт аштарын уйлап сығарырға. Татарский кетчуп бар бит, башкирский кетчуп та булдырабыҙ!
- 12. **Тарих**ыбыҙҙы өйрәнергә, белергә, таратырға тейешбеҙ. Тарих- ул һабаҡ. Тарих- ул мираҫ. Беҙ- Урал- батыр тоҡомдары. Уралда меңәр йыл йәшәгән менән ғорурланырға тейешбеҙ.
- 13. Үрнәк булырҙыҡ **билдәле шәхестәр.** Сәләмәт тормош алып барған, рухлы, билдәле шәхестәребеҙҙе ҙурларға бурыслыбыҙ, үҫкән быуындарға үрнәк итеп күрһәтергә тейешбеҙ. Ғалимдар, рәссамдәр, яҙыусылар, спортсмендар, яугирҙәр... Салауат- беҙҙең тарихыбыҙ. Эльбрус Нигматуллин- көсөбөҙҙө күрһәтә, Тамара Танһыҡҡужина- аҡылыбыҙҙы. Хәбир Сөләйманов, Денис Шафиков һәм башка боксерҙарыбыҙ- халҡыбыҙҙың даны, үрнәге.

- 14. **Аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр ҡоро** ауылдарҙа ҙур роль уйнай. Йәштәрҙе өйрәтергә
- 15. **Ауылдар**ҙы һаҡлайыҡ, ауылдарҙы яҡлайыҡ. Башҡорттар күбеһенсә ауылда йәшәгәс, ауылдарҙы үҫтереү- ул башҡорттарҙы яҡлау тигәнде аңлата.
- 16. Башҡортса яңы сифатлы **әсбап**тар кәрәк. Ҡыҙыҡлы балалар **китап**тарын сығарыу- уҡырға этәргес бер көс.
- 17. **Лозунгтар**. Ҡыҫҡаса бирелгән лозунгтар сәғәттәр буйына һөйләнгән телмәрҙән күпкә артыҡ. «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк», «Беҙ төрлө, ләкин беҙ бөтәбеҙ ҙә- башҡорттар!», «Ал да нур сәс халҡыңа», «Йөҙ йәшә, айыҡ йәшә!» һ.б.
- 18. Башҡортса **кинолар, йәнһүрәттәр** күп күрһәтергә кәрәк. Бала- саға телевизор ҡарап үҫә. Телевидение аша башҡорт телен таратыу- иң отошло ысулдарҙың береһе.

- 19. Башҡорт **бренд**ы башҡорт балы, ҡурайынан күберәк булырға тейеш.
- 20. **Ҡануниәт**. Закон менән эш итеү. Ниндәй эшкә тотонһаҡ та, нимә эшләһәк тә, бар эш законға ҡаршы килмәҫкә тейеш. Беҙ- бер халыҡҡа ла ҡаршы сыҡмайбыҙ, берһен дә кәмһетмәйбеҙ. Беҙ- башҡорт халҡын юҡҡа сыҡмаһын өсөн төрлө юлдар эҙләйбеҙ. Беҙ- башҡорт халҡын, башҡорт телен һаҡлап ҡалырға теләйбеҙ. Шуны бөтә халыҡтар ҙа аңларға тейеш.
- 21. Топонимиканы һаҡлап ҡалыу.
- 22. Төрлө һөнәр эйәләрен башҡорт халҡын үҫтереү өсөн йәлеп итеү. Юристар ҙа, телселәр ҙә, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре лә, врачтар ҙа...


- 19. Башҡорт **бренд**ы башҡорт балы, ҡурайынан күберәк булырға тейеш.
- 20. **Ҡануниәт**. Закон менән эш итеү. Ниндәй эшкә тотонһаҡ та, нимә эшләһәк тә, бар эш законға ҡаршы килмәҫкә тейеш. Беҙ- бер халыҡҡа ла ҡаршы сыҡмайбыҙ, берһен дә кәмһетмәйбеҙ. Беҙ- башҡорт халҡын юҡҡа сыҡмаһын өсөн төрлө юлдар эҙләйбеҙ. Беҙ- башҡорт халҡын, башҡорт телен һаҡлап ҡалырға теләйбеҙ. Шуны бөтә халыҡтар ҙа аңларға тейеш.
- 21. Топонимиканы һаҡлап ҡалыу.
- 22. Төрлө һөнәр эйәләрен башҡорт халҡын үҫтереү өсөн йәлеп итеү. Юристар ҙа, телселәр ҙә, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре лә, врачтар ҙа...

- 19. Башҡорт **бренд**ы башҡорт балы, ҡурайынан күберәк булырға тейеш.
- 20. **Ҡануниәт**. Закон менән эш итеү. Ниндәй эшкә тотонһаҡ та, нимә эшләһәк тә, бар эш законға ҡаршы килмәçкә тейеш. Беҙ- бер халыҡка ла ҡаршы сыҡмайбыҙ, берһен дә кәмһетмәйбеҙ. Беҙ- башҡорт халҡын юҡҡа сыҡмаһын өсөн төрлө юлдар эҙләйбеҙ. Беҙ- башҡорт халҡын, башҡорт телен һаҡлап ҡалырға теләйбеҙ. Шуны бөтә халыҡтар ҙа аңларға тейеш.
- 21. Топонимиканы һаҡлап ҡалыу.
- 22. Төрлө һөнәр эйәләрен башҡорт халҡын үçтереү өсөн йәлеп итеү. Юристар ҙа, телселәр ҙә, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре лә, врачтар ҙа...

- 23. Тарихыбыҙ шундай: башҡорттар төрлө өлкәләрҙән, төрлө ырыуҙарҙан барлыҡҡа килгән. Шулай булғас, беҙҙең антропологик типтар төрлө, диалекттар төрлө, кейем- һалым, аш-һыу, йолалар төрлө. Башҡорттар төрлө телдә һөйләшһә лә, төрлө диндә булһа ла, төрлө ерҙә йәшәһә лә, рухы булһа- башҡорт булып ҡала. Берһен дә ситкә типмәҫкә, шулай ҡабул итергә тейешбеҙ.

- **Беҙ төрлө, ләкин беҙ бөтәбеҙ ҙә- башҡорттар!**